# Рауил Бикбаевтың ижады





Бикбаев Рауил Төхфәт улы (12 декабрь 1938 йыл — 23 апрель 2019 йыл) — шағир, әҙәбиәт белгесе, йәмәғәт эшмәкәре;
1966 йылдан СССР Яҙыусылар союзы ағзаһы;
1995-2011 йылдарҙа Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе;
1996 йыл - филология фәндәре докторы, профессор;
1993 йыл - Башҡортостандың халыҡ шағиры;
1997 йыл - Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре;
1989 йыл - Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты;
1970 йыл - Ғәлимов Сәләм исемендәге премия лауреаты;
1992 йыл - Рәми Ғарипов исемендәге премия лауреаты;
2003 йыл - З. Биишева исемендәге премиялар лауреаты;
Почёт (2009), Дуҫлыҡ (2000), «Башҡортостан Республикаһында күрһәткән хеҙмәттәре өсөн» (2008) һәм Салауат Юлаев (2003) ордендары кавалеры. Өфө ҡалаһының почётлы гражданы (1999).

# РАУИЛ БИКБАЕВ ИЖАДЫНДА ТӘБИҒӘТТЕ ҺАҠЛАУ ПРОБЛЕМАҺЫНЫҢ КҮТӘРЕЛЕШЕ

Илде, телде, рухты һаҡлау проблемалары менән бер рәттән Рауил Бикбаев тәбиғәтте һаҡлау проблемаларын да күтәрә. Башҡортостан-Уралдың йөҙөк ҡашы, тәбиғәттең атаҡлы Швейцария менән ярышырлыҡ бер һоҡландырғыс бер урыны, тип дан йырланыҡ. Башҡортостан - Икенсе Баку, илдәге иң көслө нефтехимия үҙәге, Европалағы , хатта донъялағы иң ҡеүәтле сәнәғәт объекттарын тыуҙырыусы, тип беҙ байтаҡ йылдар буйы хаҡлы ғорурланып һөйләнек. Бөгөн килеп беҙ республикабыҙҙағы түҙеп торғоһоҙ күп нәмәләр хаҡында хәүефле оран һалабыҙ.Бер урында нефтехимия һәм башҡа зарарлы етештереү үҙәктәрен саманан тыш туплау, тейешле технологик талаптарын үтәмәү, ер-һыуҙарҙы аяуһыҙ бысратыу, башҡорт урмандарын йыртҡыстарса ҡырҡыу һ.б. арҡаһында Башҡортостан экологик яҡтан ерҙәге иң хәүефле төйәктәрҙең береһенә әйләнде, ҡайһы бер ҡалаларыбыҙ аяҙ көндә яҡты һауа күрмәҫ хәлгә етте. Туған тәбиғәт кенә түгел, кеше күңеле лә рәнйетелде. Шағир Рауил Бикбаев был проблемаларҙы әҫәрҙәрендә киҫкен күтәрә.

**Һыуһаным-**

**һыуҙар бирегеҙ!**

Елкендерә тағы бейеклектәр
Күңелемдә тағы тыуа таң
Иркен түбәң түшәлеп тә ятҡан
Хәтфә үлән икән Торатау





Ергә тыуған барыбер ерҙән китә,
Берәү - һуңлап, берәү – иртәрәк.
Беҙҙең генә китеү китеүме ни –
Ер йөҙөнән тауҙар китәләр!

Шағир өсөн “Ағиҙелдең көнө-илдең көнө. Ағиҙелдең йөҙө-ил йөҙө” үлсәмендә. Ер-һыуҙарың ниндәй, ил-йорттарың да шундай. Шуның өсөн тыуған тәбиғәтебеҙҙең ҡәҙерен беләйек, уны һаҡлайыҡ. Ул беҙҙе туйындырыусы ла, кейендереүсе лә. Ата-бабаларыбыҙ беҙгә ниндәй хәлдә бүләк итеп ҡалдырған, беҙ уны шул килеш килер быуындарға тапшырырға тейешбеҙ.

Башҡаса шул хәҙер заман хәле,
Башҡаса шул шағир уйҙары,
Йәмлеме Ағиҙел буйҙары,
Тәмлеме  Ағиҙел һыуҙары?





Тик барыбер хыялдарҙан айырып,
Хафа тынгы бирмәй аҡылға.
Йәмләнерме тағы Аҡ йылға,
Тәмләнерме тағы Аҡ йылға?

# Ҡотҡарырға ерҙә матурлыҡты Һуң тугелдер але, һуң түгел...





